Муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение
средняя общеобразовательная школа №5 г. Благовещенска

**Рассмотрено на заседании кафедры**
Руководитель кафедры
_______ / Безрукова Т.А./
Протокол № 6
«21» мая 2019г.

**Согласовано**
Заместитель директора по УВР
_______ /Закирова Л.З./
«27» мая 2019г.

**Утверждаю**
Директор МОБУ СОШ №5
г. Благовещенска
_______ /Кузнецова Т.Н./
Приказ № 116
«27» 05 2019г.

# РАБОЧАЯ ПРОГРАММА

**по родному(башкирскому) языку**

уровень реализации программы: начальное общее образование
срок реализации программы: 4 года
разработана на основе примерной программы З. Г. Нафиковой на родном(башкирском) языке
для учащихся 1-4 классов школ с русским языком обучения.

составитель: Гайсина Неля Мирзаевна

2019 г.

**1.Программа йөкмәткеһен үҙләштереүҙең планлаштырылған һөҙөмтәләре.**

Рәсәй Федерацияһында мәгариф тураһында»ғы законда һәм башлангыс дөйөм белем биреү федераль дәүләт стандартында ҡуйылган талаптар буйынса башҡорт теле туған тел булараҡ уҡып,дүртенсе класты тамамлаған уҡыусылар түбәндәге һөҙөмтәләргәэйә булырға тейештәр:

**Шәхси һөҙөмтәләре:**Баланы шәхес итеп үҫтереү, кешелеклелек сифаттарын тәрбиәләү. Уны үҙ аллы үҫешкә, камиллашыу оҫталығына өйрәтеү. Һөҙөмтәлә уҡымышлы, үҙ еренең, иленең, халҡының, башҡорт халҡының ҡимммәттәренә төшөнгән, уны һанлаған һәм һаҡлаған, яҡлаған социум итеп формалаштырыуға башланғыс нигеҙ һалыу.Бала үҙен Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең бер вәкиле итеп күҙаллай, уларҙың тарихына, мәҙәниәтенә битараф булмаган шәхес булып үҫергә тырыша, туган телдә яҙа һәм һөйләү белеү кешене мәҙәни яҡтан билдәләүсе күрһәткес икәнлеген аңлай, рус телендә алган белемдәрен башҡорт телен өйрәнгәндә уларҙы сағыштырыу нигеҙендә ҡуллана белә башлай, башҡорт телендә һөйләшеү һәм аралашыу кимәле буйынса үҙ-үҙенә баһа бирергә өйрәнә.

**Метапредмет һөҙөмтәләре** булып универсаль уҡыу эшмәкәрлеге (УУЭ) тора. УУЭ төрҙәре дүрт блокка бүленә: шәхси, регулятив, танып белеү һәм коммуникатив эшмәкәрлек, йәғни баланы үҙ аллы уҡырға, белем алырға өйрәтеү.Программа сиктәрендэ башҡортса яҙылған һүҙҙәрҙе, ижектәрҙе, өндәрҙе, өндәр теҙмәһен дөрөҫ әйтә, уҡый, улар менән һөйләмдәр төҙөй алыу. Бирелгән темаға диалог ҡора ала, һорауҙарға ҡыҫҡа яуап ҡайтара белеү.Башҡарған проект эше тураһында телдән отчет бирә, йәки презентация һ.б. буйынса һөйләй ала.Үтелгән орфография һәм пунктуация ҡағиҙәләрен һаҡлап, үҙ аллы йәки уҡытыусы ярҙамында өйрәнеү һәм тикшереү характерындағы яҙма эштәрҙе башҡара.

**Предмет һөҙөмтәләре.**Уҡыу предметын өйрәнеүҙә яңы белем үҙләштереү, уны эшкәртеү һәм ҡулланыу өлкәһендә тейешле тәжрибә туплау. Һүҙҙең өндәрен атау, ижеккә бүлеү, өндәр һәм хәрефтәр һанын билдәләү, дөрөҫ баҫым ҡуйыу, хәреф-өн анализы яһау; һөйләмде, кешенең исемен һәм фамилияһын баш хәреф менән яҙыу; һөйләм аҙағында тейешле тыныш билдәләрен ҡуйыу; баҫма тексты дөрөҫ итеп күсереп яҙыу; тамырҙаш һүҙҙәрҙең тамырын табыу. Изложениеның һәм иншаның ябай төрҙәрен яҙа белеү,аңлатма, орфографик һүҙлектәр ҡуллана белеү, аңлатма, орфографик һүҙлектәр ҡуллана белеү, яҙыу барышында хәрефтәрҙең,һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышын тикшереп, хатаны төҙәтә белеү.

**2.Туған (башкорт) теле предметы буйынса дөйөм башланғыс белем биреү йөкмәткеһе.**

Уҡыусылар тәү башлап укыу эшмәкәрлеге төрҙәрен үҙләштерәләр:тыңларға, һөйләргә,уҡырға, яҙырға өйрәнәләр. Белем алыу рус телендә ойошторолғанлыҡтан, беренсе класс уҡыусылары башҡорт телен өйрәнеүҙе түбәндәге этаптар аша һәм рус теле менән юҫыҡта параллель өйрәнәләр.

**1.Грамотаға өйрәтеү.**

Туған (башҡорт) телен өйрәтеү, рус телендәге кеүек үк түбәндәге этаптарҙы үҙ эсенә ала:

1.Грамотаға өйрәтеү һәм телмәр үҫтереү.Телдән әҙерлек осоро.

2.Әлифба осоро. Грамотаға өйрәтеү, уҡыу, яҙыу, телмәр үҫтереү.

3.Әлифба аҙағы осоро.Һөйләү һәм яҙма телмәрҙе комплекслы үҫтереү.

Программала грамотага өйрәтеүҙең телдән әҙерлек осоронда беренсе класс уҡыусыларын түбәндәгеләргә өйрәтеү планлаштырылған:

- башҡорт телендә яңғыраған телмәрҙе тыңлап аңлай, мәғәнәһенә төшөнә белеү күнекмәләрен формалаштырыу;
- башҡорт телендә әйтелгән телмәр ағышынан һүҙҙе, ижекте, өндө, өндәр ҡушылмаһын, бигерәк тә башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен айыра, таный, әйтә белергә өйрәтеү;
- телдән әйтелгән йәки уҡылған текстың аңлатҡан мәғәнәһенә төшөндөрөү.

Программаның беренсе класс өсөн тәғәйенләнгән йөкмәткеһе мәктәпкә килгән балаларҙың телмәр үҫеше кимәленең төрлө булыуын иҫәпкә алып билдәләнә. Шунлыҡтан, грамотаға өйрәтеү этабында алдан үткәрелә торған телдән әҙерлек осоронда,беренсенән, лексик һәм грамматик материалдарҙы күберәк ҡабатлатыу һәм нығытыу планлаштырыла. Икенсе яҡтан,ошо рәүешле балаларҙың белем кимәлен тигеҙләп, уларҙы грамотаға өйрәтеүгә әҙерлек эше алып барыла:һөйләшеү телмәрен үҫтереү,өндәрҙең дөрөҫ әйтелешен нығытыу, аралашыуөсөн кәрәкле һүҙҙәрҙеөйрәнеп һүҙлекте байытыу,йыш ҡулланыла торған телмәр өлгөләрен, һөйләм ҡалыптарын үҙләштереү, һөйләмдәр төҙөргә, уларҙы кәрәкле интонация менән бирә белергә өйрәтеү.

Беренсе класта һөйләү һәм яҙма телмәр түбәндәге күнекмәләрҙең формалашыуын тәьмин итә:

- башҡорт өндәрен, өндәр ҡушылмаһын һәм ижектәрҙе ишетеп аңлап, уларҙы дөрөҫ әйтеү,
- таныш булған ябай ғына темаларға бәйле диалог ҡороу,
- аңлау өсөн еңел булған бәләкәй генә тексты дөрөҫ уҡыу,
- өйрәнеү һәм тикшереү масатында үткәрелгән яҙма эштәрҙе өйрәнелгән орфограммаларҙы һаҡлап, хәрефтәр яҙылышын дөрөҫ башҡарып яҙыу.

2.**Туған (башҡорт) телен системалы өйрәтеү курсы.**

2-4 се кластарҙа башҡорт телен системалы өйрәтеү курсы башлана, башҡорт теле грамматикаһын һәм орфографияһын үҙләштереү өҫтөндәэш алып барыла.

Икенсе класта телмәр үҫтереү дауам ителә: бирелгән өлгө буйынса диалогтар ҡороп һөйләшергә, һорауҙар биреп,уларға яуап ҡайтарырға өйрәтеү, уҡыу техникаһы һәм матур яҙыу өҫтөндә эҙмә-эҙлекле эш алып барыла. Лексик темалар ҡабатланып, киңәйтеп бирелә.Һүҙ байлығын үҫтереүгә күп көс һалына.

Өсөнсө класта тәүге ике ай йылда үтелгән материалдар ҡабатлана, тәрәнәйтеп өйрәнелә. Уҡыусыларҙың һүҙ байлығы әүҙем генә үҫешкәнлектән, лексик темаларҙыңйөкмәткеһеаша уҡыусыларға башҡорт теленең лексикаһы, фонетикаһы һәм грамматикаһы тураһында ябай ғына кимәлдә фәнни мәғлүмәттәр бирелә башлай һәм уларҡәмәли кимәлдә күнегеүҙәраша үҙләштерелә. Был класта уҡыусыларҙа лингвистик, телмәр һәм мәҙәни компетенцияларҙы үҫтереүэше алғы планға сыға.Өйрәнеүсенең инша һәм изложение яҙыуҙы башҡарыу менән бер рәттән, ижади эш төрҙәренә иғтибары арта: парлашып, төркөмдәргә бүленеп эшләү хуп күрелә.

Дүртенсе класта тирә-йүнде башҡорт телендә тәрәнерәк өйрәнеү нигеҙендә уҡыусыларҙың телмәр компетенцияһы үҫешә. Рус һәм башҡорт телдәрендәгетел күренештәрен сағыштырып,анализлап, дөйөмләштереп, балалар башҡорт теленең нормаларын программаға ярашлыүҙләштерә.

Дүртенсе кластың аҙағына уҡыусыларҙың башҡорт телендә телмәр үҫеше түбәндәгеләргә ирешеүҙе күҙаллай:

- тыңлай, һөйләй, уҡый, яҙа белеү күнекмәләренә эйә булыу,
- иркен аралаша алыр өсөн тейешле һүҙ байлығы булыу,
- аралашыуҙың диалог( бәхәс, әңгәмә) формаларын практик яҡтан үҙләштереү,
- көнкүрештә аралашыу, һөйләшеү ҡағиҙәләрен үтәй белеү (һаулыҡ һорашыу, хушлашыу, ғәфү үтенеү, рәхмәт әйтә белеү, үтенесте белдереү),

Башҡортса һөйләргә һәм уҡырға өйрәнеү эшмәкәрлеге дөрөҫ һәм матур яҙыу күнекмәләренең формалашыуын талап итә:

- башҡорт телендә бирелгән һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе һәм текстарҙы дөрөҫ күсереп яҙыу,
- өйрәнелгән орфограммаларҙы, пунктуация ҡағиҙәләрен ҡулланып, телдән әйтелгән тексты ишетеп, дөрөҫ яҙыу,
- үҙ аллы бәйләнешле яҙма телмәр( һорауҙарға яуаптар, өйрәнеүсе инша, йәки изложение) төҙөп яҙыу.

Күнегеүҙәр башҡарғанда каллиграфия талаптарын үтәү мөһим: хәрефтәрҙең ауышлығы, һәр береһенең бейеклеге һәм киңлеге буйынса тигеҙ килеүе, юлдан ситкә сыҡмай, тигеҙ итеп, хәрефтең формаһын боҙмай яҙыу.

Беренсе класта һәр уҡыусының, 2-4 се кластарҙа һайланма рәүештә кемгә кәрәк- шуның дәфтәренә хәрефтәрҙе яҙыу, уларҙы бер-береһе менән тоташтырыу өлгөләрен яҡын күрһәтеү бирелә.

1- 4- се кластарҙа башҡорт теленең контроль диктант йәки өйрәнеү иншаһын, изложенияһын яҙғанда һүҙҙәр һаны яҡынса түбәндәгесә тәкдим ителә:

| Эштәр төрө | 1-се класс | 2- се класс | 3-сө класс | 4-се класс |
|---|---|---|---|---|
| Диктант | 5-25 | 25-30 | 35-40 | 60-65 |
| Изложение | | 25-30 | 55-65 | 80-90 |
| Инша | | 20-30 | 40-50 | 70-80 |

Өйрәнеү, тикшереү һәм контроль яҙма эш төрҙәренә (һорауҙарға яуаптар, изложение, инша, диктант, контроль күсереп яҙыуһ.б.) телде өйрәнеүгә бүленгән сәғәттәр һанына планлаштырыла.

Башланғыс дөйөм белем биреүҙең федераль стандарты талаптарына ярашлы, уҡыусыларға башҡорт теле системаһын өйрәтеү һөҙөмтәләре ике төрлө блокта бирелә. Беренсеһе – «Сығарылыш уҡыусыһы өйрәнәсәк»тип атала һәм унда программаның һәр бер бүлеге буйынса мотлаҡ үҙләштерелергә тейешле булған төп белем күрһәткестәре билдәләнә.

Икенсеһе «Сығарылыш уҡыусыһы өйрәнеү мөмкинлеге аласаҡ» тигән исе аҫтында бирелә һәм блок төп белемде тәрәнәйтеп, киңәйтеп өйрәнеүҙе, йәғни материалды тәрәнерәк итеп өйрәнеүҙе күҙ уңында тота. Был белем күрһәткестәре бөтә уҡыусылар өсөн мотлаҡ түгел тип һанала, был өлкәләге тел материадары менән ҡыҙыҡһынған һәм һәләтле балаларға ғына тәғәйенләнә.

Программала был күрһәткестәр һәр бер бүлектә курсив менән бирелә.

**Фонетика һәм орфоэпия.**

Һуҙынҡы һәм тартынҡы өндәрҙе айырыу.Һүҙҙә баҫымлы һәм баҫымһыҙ ижектәрҙе таба белеү, рус теле менән сағыштырыу.Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар.Яңғырау һәм һаңғырау, парлы һәм парһыҙ тартынҡыларҙы айыра белеү.Һөйләмдә мәғәнә буйынса баҫым төшкән һүҙҙәрҙе таба белеү. Башҡорт өндәрен, өндәр теҙмәһен әҙәби тел нормаларына ярашлы әйтә белеү. Һүҙгә фонетик анализ яһау.

**Графика.**

Өндәрҙе һәм хәрефтәрҙе айырыу.Яҙыуҙа **ь,ъ** айырыу билдәләрен ҡулланыу. **Көньяҡ, бесәй** тибындағы һәм **е,ё,ю,я** хәрефтәре булған һүҙҙәрҙә өндәрҙең һәм хәрефтәрҙең һанын сағыштырып билдәләү.

**Лексика** .

Һүҙҙең яңғырашы менән мәғәнәһенең бер бөтөн икәнлеген аңлау. Һүҙлектән һүҙҙең мәғәнәһен табыу.

**Һүҙьяһалыш (морфемика).**

Тамырҙаш һүҙҙәр тигән төшөнсәнең мәғәнәһен аңлау. Тамырҙаш һүҙҙәрҙең яһаусы ялғауҙар ярҙамында барлыҡҡа килеүе.

**Морфология.**

Һүҙ төркөмдәре; һүҙ төркөмдәренең үҙ аллы һәм ярҙамсы төркөмдәргә бүленеүе.
Исем тураһында төшөнсә.Мәғәнәһе менән телмәрҙә ҡулланышы. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙе айыра һәм таный белеү. Исемдәргә Кем?Нимә? һорау һорауҙарына яуап ҡуя белеү. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреүе.Исемдәрҙең эйәлек заты категорияһы. Морфологик тикшереү.
Ҡылым тураһында төшөнсә.Мәғәнәһе менән телмәрҙә ҡулланышы. Ҡылымдарҙың һан, заман категорияһы.Хәҙерге заман ҡылымдарының һан,зат, барлыҡ- юҡлыҡ формалары.Морфологик тикшереү.
Сифат тураһында төшөнсә. Мәғәнәһе менән телмәрҙә ҡулланышы. Сифаттарҙың яһалышы. Төп һәм шартлы сифаттар.Сифат дәрәжәләре.Морфологик тикшереү.
Алмаш тураһында төшөнсә. Алмаш төркөмсәләре.Зат алмаштарының берлек- күплек формалары, килеш менән үҙгәреше. Һорау,күрһәтеү алмаштары. Морфологик анализ.
Һан. Ябай һәм ҡушма һандар.Һан төркөмсәләре.Морфологик анализ. Килештә үҙгәреше.
**Синтаксис.**
Һүҙҙе, һүҙбәйләнеште, һөйләмде айыра белеү.
**Орфография һәм пунктуация.**
Офографик яҡтан һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙа белеүҙе формалаштырыу.Орфограммаларҙың дөрөҫлөгөн тикшереү ысулдарын белеү. Орфографик һүҙлекте ҡуллана белеү.Дөрөҫ итеп яҙыу ҡағиҙәләрен ҡулланыу.

## 3.Башланғыс кластарҙа башҡорт теле уҡытыуҙың тематик йөкмәткеһе.

**1-се класс өсөн уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе.**

| | | |
|---|---|---|
| 1 | Предмет һәм һүҙ. | 4 |
| 2 | Предмет хәркәтен белдергән һүҙҙәр. | 2 |
| 3 | Предметтың урынын белдереүсе һүҙҙәр? Ҡайҙа? һорауы. | 1 |
| 4 | Предметтың иҫәбен белдереүсе һүҙҙәр? Нисә? һорауы. | 2 |
| 5 | Предметтың билдәһен белдереүсе һүҙҙәр? Нисә? һорауы. | 2 |
| 6 | Һөйләм. Һүҙбәйләнеш. | 3 |
| 7 | Ярҙамсы һүҙҙәр.(һәм, менән). | 3 |
| 8 | Тикшереү эше. | 1 |

| | | |
|---|---|---|
| 9 | Өн .һүҙ. | 1 |
| 10 | Ижек. | 1 |
| 11 | Баҫым. | 1 |
| 12 | Хәреф өндөң тамғаһы. | 1 |
| 13 | Хәрефтәр иленә сәйәхәт. Алфавит. | 1 |
| 14 | Алфавит. | **2** |
| 15 | Тикшереү эше. | 1 |
| 16 | Һуҙынҡы өндәр. | 1 |
| 17 | Тартынҡы өндәр. | 1 |
| 18 | Һөйләм. | 4 |

**2-се класс өсөн уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе.**

| № | Тема |
|---|---|
| | **1 се сирек 17** |
| 1 | Өн, хәреф. |
| 2 | Һуҙынҡылар. |
| 3 | Тартынкылар. |
| 4 | Яңғырау тартынкылар. |
| 5 | Һаңғырау тартынкылар. |
| 6 | К-Ғ сиратлашыуы |
| 7 | П-Б сиратлашыуы |
| 8 | Һүҙҙәге һуҙынкылар. |
| 10 | -лы,-ле,-лө ялғауҙары. |
| 11 | -лы,-ле,-лө ялғауҙары. |

| | |
|---|---|
| 12 | Диктант. Ҡошсоҡ. |
| 13 | Хаталар өҫтөндә эш. |
| 14 | Э э–өн- хәрефе |
| 15 | Е хәрефе [э] өнө. |
| 16 | Е хәрефе [э] өнө. |
| 17 | -һыҙ,-һоҙ, -һеҙ,-һөҙ   ялғауҙары |
| | **2 се сирек -15** |
| 18 | -ма,-мә ялғауҙары. |
| 19 | Я хәрефенең яҙылыуы, я хәрефенең [йа]өндәре булып ишетелеүе. |
| 20 | Я хәрефенең яҙылыуы, я хәрефенең [йа] өндәре булып ишетелеүе. |
| 21 | Ю хәрефе яҙылыуы, ю хәрефенең [йу ]өндәре булып ишетелеүе |
| 22 | Ю хәрефе яҙылыуы, ю хәрефенең [йу] өндәре булып ишетелеүе |
| 23 | [у], [ү] өндәре |
| 24 | Изложение. Эт менән бесәй. |
| 25 | Хаталар өҫтөндә эш.<br>В  хәрефенең рус һүҙҙәрендә, башҡорт һүҙҙәрендә уҡылыуы. |
| 26 | Нимә менән? һорауы. |
| 27 | Йә,йе ҡушымсалары. |
| 28 | Йә,йе ҡушымсалары. |
| 29 | Ҡайҙан? Һорауы. |
| 30 | Диктант.Кыш. |
| 31 | Хаталар өҫтөндә эш.<br>Йө,йо ҡушымсалары. |
| 32 | Йү,йы  ҡушымсалары. |
| | **3 сө сирек**-19 |

| | |
|---|---|
| 33 | Күсереп яҙыу.Ҡыш. |
| 34 | [З] ,[ҙ] өндәрен сағыштырыу. Хаталар өҫтөндә эш. |
| 35 | [З],[ҙ] өндәрен сағыштырыу. |
| 36 | [З],[ҙ] өндәрен сағыштырыу. |
| 37 | [һ],[х] өндәрен сағыштырыу. |
| 38 | [һ],[х] өндәрен сағыштырыу. |
| 39 | [С],[ҫ] өндәрен сағыштырыу. |
| 40 | [С],[ҫ] өндәрен сағыштырыу. |
| 41 | Инша.Яҙғы тәбиғәт. |
| 42 | Хаталар өҫтөндә эш. |
| 43 | [Ғ],[г] өндәрен сағыштырыу. |
| 44 | [Ғ],[г] өндәрен сағыштырыу. |
| 45 | [н],[ң] өндәрен сағыштырыу. |
| 46 | [н],[ң] өндәрен сағыштырыу. Диктант. Башҡортостан тәбиғәте. |
| 47 | Хаталар өҫтөндә эш. [Ц] өнө. |
| 48 | [Ч], [щ] өндәре. |
| 49 | [Ч], [щ] өндәре. |
| 50 | Парлы тартынкылар. |
| 51 | Алфавит. |
| | **4 се сирек-15** |
| 52 | Исем |
| 53 | Исем. |
| 54 | Исем. |
| 55 | Ҡылым. |
| 56 | Ҡылым. |
| 57 | Сифат. |

| | |
|---|---|
| 58 | Сифат. |
| 59 | Тикшереү эше |
| 60 | Ярҙамсы  һүҙҙәр. |
| 61 | Ярҙамсы  һүҙҙәр. |
| 62 | Һөйләмдең баш киҫәктәре. |
| 63 | Һөйләмдең баш киҫәктәре. |
| 64 | Контроль диктант. Өфө |
| 65 | Хаталар өҫтөндә эш |
| 66 | Һөйләм. |

**3-сө  класс өсөн  уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе .**

| № | Тема |
|---|---|
| | **1 сирек  -  15** |
| 1 | Ҡайҙа һорауы? |
| 2 | Һөйләм. |
| 3 | Эйә менән хәбәр. |
| 4 | Һөйләм киҫәктәре. |
| 5 | Йыйнаҡ һөйләм |
| 6 | Тарҡау һөйләм |
| 7 | Бер мәғәнәле һүҙҙәр. |
| 8 | Бер мәғәнәле һүҙҙәр. Инша. Минең ғаиләм. |
| 9 | Синонимдар. |
| 10 | Антонимдар. |
| 11 | Омонимдар. |
| 12 | Диктант. Алтын көҙ. |
| 13 | Хаталар өҫтөндә эш.Тамырҙаш һүҙҙәр |

| | |
|---|---|
| 14 | Һүҙҙәр. Ижек |
| 15 | Баҫым. |
| | **2 сирек-15** |
| 16 | Һуҙынҡылар. |
| 17 | Тартынҡылар. |
| 18 | Төп башҡорт һүҙҙәре. |
| 19 | Төп башҡорт һүҙҙенең тамырында **о** йәки **ө** хәрефе булыуы. |
| 20 | Төп башҡорт һүҙҙенең тамырында **о** йәки **ө** хәрефе булыуы. |
| 21 | ә],[ө] өндәре – нәҙек һуҙынҡылар. Изложение.Әсәйгә әйтмәҫһең. |
| 22 | [ә],[ө] өндәре – нәҙек һуҙынҡылар. |
| 23 | [йэ],[э] өндәре – нәҙек һуҙынҡылар. |
| 24 | Ыы-өн-хәрефе. |
| 25 | У,ү өндәре. |
| 26 | Тартынҡы өндәрҙең яңғырау,һаңғырау, парлы һәм парһыҙ булыуы. |
| 27 | Тартынҡы өндәрҙең яңғырау,һаңғырау, парлы һәм парһыҙ булыуы. |
| 28 | Диктант.Ҡыш. Г,ғ хәрефтәре. |
| 29 | Хаталар өҫтөндә эш. К,ҡ хәрефтәре. |
| 30 | З,ҙ хәрефтәре. |
| | **3 се сирек-19** |
| 31 | Х,һ хәрефтәре. |
| 32 | Н,ң хәрефтәре. |
| 33 | С,ҫ хәрефтәре. |
| 34 | У,у хәрефтәре. Тикшереү эше. |
| 35 | В,в өн- хәрефе. |
| 36 | Й хәрефе |
| 37 | [Ц],[ч],[щ] өндәре. |

| | |
|---|---|
| 38 | Ь һәм ъ билдәләре. |
| 39 | Исем. |
| 40 | Яңғыҙлыҡ, уртаҡлыҡ исемдәр. |
| 41 | Исемдәрҙең күплек ялғауҙары. |
| 42 | Исемдәрҙең күплек ялғауҙары. |
| 43 | Исемдәрҙең күплек ялғауҙары. |
| 44 | Ҡуш тартынҡылар |
| 45 | Нәҙеклек билдәһе. Диктант. Ҡояшлы яҙ етте. |
| 46 | Килеш.Төп килеш. Эйәлек килештәр. |
| 47 | Төбәү килеш. |
| 48 | Төшөм килеш. |
| 49 | Урын-ваҡыт килеш. |
| | **4 се сирек-16** |
| 50 | Сығанаҡ килеш. Килештәр. |
| 51 | Һүҙҙең –ль,-нь,-брь хәрефтәренә бөтөүе. |
| 52 | Ҡылым. |
| 53 | Ҡылымдың юҡлыҡ формаһы. |
| 54 | Ҡылымдың  хәҙерге заман берлек һаны.Тикшереү эше. |
| 55 | Ҡылымдың  хәҙерге заман берлек һаны |
| 56 | Ҡылымдың   үткән заман берлек һаны |
| 58 | Ҡылымдың   үткән заман берлек һаны |
| 59 | Сифат. |
| 60 | Сифаттың сағыштырыу дәрәжәһе. |
| 61 | Сифаттың артыҡлыҡ дәрәжәһе. |
| 62 | Сифаттың аҙһытыу  дәрәжәһе. |
| 63 | Алмаш. Диктант.Олатайым. |
| 64 | Зат алмаштары. |

| | |
|---|---|
| 65 | Эйәлек алмаштары. |
| 66 | Ҡабатлау. Исем. |

**4-се класс өсөн уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе.**

| № | Тема |
|---|---|
| | **1 сирек.** |
| 1 | Һөйләм. |
| 2 | Һөйләм.Йыйнаҡ һөйләмдәр. |
| 3 | Эйә менән хәбәр. |
| 4 | Һөйләм киҫәктәре. |
| 5 | Таҫҡау һөйләм |
| 6 | Аныҡлаусы. |
| 7 | Аныҡлаусы. Инша. Минең ғаилә. |
| 8 | Тултырыусы. Хаталар өҫтөндә эш . |
| 9 | Тултырыусы. |
| 10 | Хәл. |
| 11 | Хәл. |
| 12 | Диктант. Башҡортостан. |
| 13 | Хаталар өҫтөндә эш.Һөйләм. |
| 14 | Һүҙбәйләнеш. |
| 15 | Ижек |
| 16 | Баҫым. |
| 17 | Башҡорт теленең һүҙлек составы. |
| | **2 сирек.** |
| 18 | Бер һәм күп мәғәнәле һүҙҙәр. |
| 19 | Бер һәм күп мәғәнәле һүҙҙәр. |
| 20 | Һүҙ составы. |

| | |
|---|---|
| 21 | Ялғауҙар. Изложение. Өйгә эш. |
| 22 | Ялғауҙар. Хаталар өҫтөндә эш . |
| 23 | Алфавит. |
| 24 | Е,ё,ю,я хәрефтәре һүҙҙәрҙә. |
| 25 | Ярҙамсы һүҙҙәр. |
| 26 | Ярҙамсы һүҙҙәр. |
| 27 | Һүҙ төркөмдәре. |
| 28 | Исем. |
| 29 | Яңғыҙлыҡ,уртаҡлыҡ исемдәр. |
| 29 | Диктант. Декабрь |
| 31 | Хаталар өҫтөндә эш . Исемдәрҙең эйәлек заты. |
| 32 | Исемдәрҙең эйәлек заты менән берлектә үҙгәреше. |
| 33 | Исемдәрҙең эйәлек заты менән берлектә үҙгәреше. |
| | **3 се сирек.** |
| 34 | Исемдәрҙең эйәлек заты менән күплектә үҙгәреше. |
| 35 | Исемдәрҙең эйәлек заты менән күплектә үҙгәреше. |
| 36 | Исемдәрҙең эйәлек заты менән күплектә үҙгәреше. |
| 37 | Килеш. Төп,эйәлек килеш. |
| 38 | Төп,эйәлек килеш. |
| 39 | Төбәү,төшөм килеш. |
| 40 | Төбәү,төшөм килеш. |
| 41 | Урын-ваҡыт, сығанаҡ килеш. |
| 42 | Урын-ваҡыт, сығанаҡ килеш. |
| 43 | Һүҙҙең тамыры.Тикшереү эше |
| 44 | Һүҙҙең тамыры. |
| 45 | Парлы яңғыраү һәм һаңғыраү тартынҡы. |
| 46 | Исем. |
| 47 | Сифат. |

| | |
|---|---|
| 48 | Төп сифаттар. |
| 49 | Сағыштырыу сифаттар. Диктант. Ҡара алтын. |
| 50 | Артыҡлыҡ сифаттар. Хаталар өҫтөндә эш . |
| 51 | Аҙһытыу сифаттар. |
| 52 | Төп сифаттар. |
| 53 | Шартлы сифаттар |
| | **4 се сирек.** |
| 54 | Сифаттар. Тикшереү эше. |
| 55 | Һан. Хаталар өҫтөндә эш . |
| 56 | Ябай һәм ҡушма һандар.Төп һандар. |
| 57 | Алмаштар. |
| 58 | Алмаш төркөмсәләре. |
| 59 | Ҡылым. |
| 60 | Ҡылымдың заман формалары. |
| 61 | Ҡылымдың үткән заманы. |
| 62 | Ҡылымдың үткән заманы. |
| 63 | Ҡылымдың үткән заманы. |
| 64 | Ҡылымдың хәҙерге заманы. |
| 65 | Ҡылымдың хәҙерге заманы. |
| 66 | Ҡылымдың хәҙерге заманы. |
| 67 | Ҡылымдың киләсәк заманы.Диктант. Атайым. |
| 68 | Ҡылымдың киләсәк заманы. Хаталар өҫтөндә эш . |
| 69 | Ҡылымдың киләсәк заманы. |
| 70 | Ҡабатлау. |